**МИНИСТЕРСТВО ПРОСВЕЩЕНИЯ РОССИЙСКОЙ ФЕДЕРАЦИИ**

**Министерство образования Республики Башкортостан**

**Муниципальный район Баймакский район**

**МОБУ СОШ с.Билялово**

| РАССМОТРЕНО | СОГЛАСОВАНО | УТВЕРЖДЕНО |
|---|---|---|
| на заседании ШМО | зам.директора по УВР | Директор |
| Габдрашитова Э.М. | Мавлютова М.М. | Аминев А.И. |
| Протокол №1 от «14» августа 2023 г. | Протокол №1 от «18» августа 2023 г. | Приказ №62 от «21» августа 2023 г. |

**РАБОЧАЯ ПРОГРАММА**

**учебного предмета «Родной язык»**

для обучающихся 1- 4 классов

**с.Билялово 2023**

# Аңлатма яҙыу

Был программала башланғыс кластарҙа башҡорт теле фәне буйынса уҡытыу тематикаһы, уның йөкмәткеһе һәм уҡыусы үҙләштерергә тейеш булған универсаль уҡыу эш төрҙәре системаһы, метапредмет, шәхси, предмет һөҙөмтәләре бар.

Мәктәп алдында, шулай уҡ тел дәрестәрендә, ҡуйылған иң төп **маҡсат** - баланы шәхес итеп үҫтереү.

Яңы стандарттар буйынса уҡыусыларҙа лингвистик (тел), аралашыу (коммуникатив), этнокультура өлкәһенә ҡараған (культурологик) компетентлыҡ булдырыу талап итела.

**Лингвистик компетентлыҡ** (уҡыусыларҙың башҡорт теленән мәғлүмәтлелеге) өндәр һәм хәрефтәрҙе, һүҙьяһалышын, һүҙбәйләнештәрҙе, һөйләмдәрҙе, һүҙ төркөмдәрен, һөйләм киҫәктәрен, лексик һәм грамматик берәмектәрҙе, лингвистик анализды һ. б. үҙ эсенә ала.

**Аралашыу (коммуникатив) компетентлығы** - уҡығанды һәм башҡалар һөйләгәнде аңлау, хәҙерге әҙәби башҡорт теленең нормаларына эйә булыу, һүҙ байлығын, телдең грамматик яғын дөрөҫ итеп үҙләштереү, телдән һәм яҙма формала бәйләнешле телмәр күнекмәләрен булдырыу һ. б.

**Этнокультура өлкәһенә ҡараған (культурологик) компетентлыҡ,** йәғни телде милли-мәҙәни юҫыкта үҙләштереү - ул уҡыусыларҙың телгә өйрәнеү барышында милли үҙенсәлектәрҙе сағылдырған текстар менән эшләүе, халҡыбыҙҙың тормош- көнкүреш, йола, ғөрөф-ғәҙәт үҙенсәлектәрен, шанлы үткәнен, әҙәп-әхлаҡ нормаларын, телмәр әҙәплелеген, һынлы сәнғәт әҫәрҙәрен, мәҙәниәтен, халыҡ ауыҙ-тел ижады үрнәктәрен белеүе, башҡорт халҡының телмәр әҙәплелеген үҙләштереүе, рухи ҡомартҡыларын ихтирам итеүе һ. б.

Башланғыс мәктәптә башҡорт теле дәрестәрендә белем биреүҙең төп **бурыстары:**

- туған телдә камил һөйләшеү, фекереңде еткерә белеү, тел һәм телмәр күнекмәләрен тәрән үҙләштереүгә өлгәшеү;

- уҡыусыларҙың төрлө эшмәкәрлекте (уҡыу һәм белем алыу, хеҙмәт, аралашыу күнекмәләрен) үҙләштереүҙәренә ирешеү, универсаль уҡыу эш төрҙәренә өйрәтеү;

- башҡорт халҡының рухи мираҫын өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү;

- дәреслек, өҫтәмә материал, һүҙлектәр, белешмә әҙәбиәт менән эш итеү күнекмәләрен камиллаштырыу;

- башҡорт телен башҡа фәндәр буйынса белем алыу сараһы булараҡ ҡулланырға әҙерләү;

- уҡыусыларҙың логик фекерләү һәләттәрен үҫтереү.

Программаның бурыстарын тормошҡа ашырыу өсөн заманса эш методтарын һәм алымдарын ҡулланырға кәрәк. Дәрестә уҡыусыларға төплө белем нигеҙҙәре, ныҡлы күнекмәләр биреү менән бергә, уларҙың танып белеү эшмәкәрлеген һәм фекерләүен үҫтереүсе, дөйөм үҫешен тәьмин итеүсе алымдар һәм саралар менән файҙаланыу мотлаҡ талап булып тора. Уҡыусылар грамматик ҡағиҙәләрҙе практик эш нигеҙендә аңлап, әүҙем үҙләштерергә, алған белемдәрен аңлата, нигеҙләй, иҫбатлай, ҡуллана белергә тейеш. Уҡыусыларға проект төҙөү методын ҡулланыу ҙа тәҡдим ителә.
Уңышҡа ирешеү өсөн тел дәрестәрен уҡыу дәрестәре менән тығыҙ бәйләп алып барыла.
Программа түбәндәге **принциптарға** таянып төҙөлдө:

1) һәр баланың шәхси үҙенсәлектәрен иҫәпкә алыу;

2) фәннилек һәм системалылыҡ принциптары;

3) уҡыусыларҙы төрлө яҡлап өҙлөкһөҙ үҫтереү;

4) баланың психик һәм физик һаулығын һаҡлау.

Программаның нигеҙендә коммуникативлыҡ принцибыята.

**Уҡыу предметына дөйөм характеристика**
Башҡорт теле курсында предмет ярҙамында түбәндәге үҫеш юлдары тор мошҡа ашырыла:
- предмет кимәлендә белемгә эйә булыу;
- уҡыу техникаһын үҫтереү, текстарҙы анализлау юлдарына эйә булыу;
- яҙма һәм һөйләү телмәренә эйә ***булыу;***
- тел тураһында белем алыу һәм системалаштырыу;
- орфография һәм пунктуацияны өйрәнеү;
- башҡорт теленең тәрбиәүи потенциалын ҡулланыу;
- телде тойомлауҙы үҫтереү.

**Фонетика һәм графика**
Башланғыс класты тамамлаусы уҡыусы түбәндәге компетентлыҡҡа эйә була:
-өндәрҙе һәм хәрефтәрҙе айырыу;
-өндәргә характеристика биреү:һуҙынҡылар (нәҙек һәм ҡалын, баҫымлы һәм баҫымһыҙ); тартынҡылар (яңғырау һәм һаңғырау, парлы һәм парһыҙ);

-башҡорт алфавитында хәрефтәрҙең урынлашыу тәртибен һәм уның әһәмиәтен үҙләштереү (һүҙҙәрҙе билдәле тәртипкә килтереү, алфавит ярҙамында кәрәкле мәғлүмәт эҙләү һ. б.).
Башланғыс класты тамамлаусы укыусы бирелгән схема буйынса өн-хәреф анализын эшләргә өйрәнеү һәм уның дөрөҫ булыу-булмауын тикшереү мөмкинселегенә эйә булырға тейеш.

**Орфоэпия**

Уҡыусы өйрәнергә мөмкинселек ала:
-башҡорт теленең нормаларын үтән уҡыу һәм һөйләү, әңгәмәселәренең телмәрендә был нормаларҙың үтәлешен баһалау (программала бирелгән күләм кимәлендә);
-белмәгән осраҡта һүҙлектән йәки дәреслектән дөрөҫ әйтелеш нормаларын үҙ аллы табыу йәки уҡытыусыға мөрәжәғәт итеү.

**Һүҙ составы**

Башланғыс класты тамамлаусы уҡыусы түбәндәге компетентлыҡҡа эйә
булa:
-үҙгәрмәүсе һәм үҙгәреүсе һүҙҙәрҙе айырыу;
-тамырҙаш һүҙҙәрҙе һәм һүҙ формаларын таныу;
-һүҙҙәрҙә тамыр, яһаусы һәм үҙгәртеүсе ялғауҙарҙы табыу.
Башланғыс класты тамамлаусы уҡыусы һүҙҙәрҙе составы буйынса тикшерә белергә, анализ яһарға өйрәнеү мөмкинселегенә эйә була.

**Лексика**

Башланғыс класты тамамлаусы уҡыусы түбәндәге компетентлыҡҡа эйә бу лырға тейеш:
-һүҙҙең мәғәнәһен дөрөҫләү, кәрәк булған һүҙҙе айырып алыу;
-һүҙҙең мәғәнәһен текст буйынса йәки аңлатмалы һүҙлек буйынса дөрөҫләү
Уҡыусы **өйрәнергә мөмкинселек ала**:
-бер төрлөлөктән азат булыу маҡсатында тейешле синонимдарҙы табыу һәм ҡулланыу;
-сағыштырыу һәм теүәл характеристика биреү өсөн антонимдар ҡулланыу;
-текстағы телмәрҙә ҡулланылған тура һәм күсмә мәғәнәле һүҙҙәрҙе таныу;
- ябай фразеологик берәмектәрҙең мәғәнәһен аңлау һәм уларҙы телмәрҙә ҡулланыу;
-һүҙҙәрҙе урынлы йәки урынһыҙ ҡулланыуҙы баһалай белеү;
-аралашыу мәсьәләһен урынлы хәл итеү маҡсатында тәҡдим ителгән һүҙҙәрҙең тейешлеһен һайлап алыу.

**Морфология**

Башланғыс класты тамамлаусы уҡыусы түбәндәге компетентлыҡҡа эйә булырға тейеш:
-исемдең һанын, затын, килешен, һөйләмдәге урынын билдәләү, исемдәргә морфологик анализ яһау;
-сифаттарҙың төрөн, дәрәжәһен билдәләү, уларға морфологик анализ яһау;
-ҡылымдың грамматик билдәләрен: һөйкәлешен, заманын, затын билдәләү, морфологик анализ яһау;

-рәүештәрҙең грамматик билдәләрен таныу: үҙгәрмәүсе һүҙ төркөмөн,төрөн, дәрәжәһен белеү;
-алмаштарҙың грамматик билдәләрен таныу: һанын, затын;
-һандарҙың грамматик билдәләрен белеү: төрөн, төркөмсәләрен һ. б.

**«Башҡорт теле» предметының уҡыу планындағы сәғәттәр бирелеше**

Базис уҡыу планына ярашлы, Рәсәй Федерацияһының дөйөм белем биреү мәктәптәрендә «Башҡорт теле» предметын өйрәнеүгә башланғыс класта бөтәһе 408 сәғәт бүленә. (I класта грамотаға өйрәтеүгә - 115, башҡорт теленә - 33,туғантелгә- 23 сәғәт, II, III, IV кластарҙа 102 - аҙнаһына 3-әр сәғәт (34 аҙнанан сығып))

**Уҡыу йөкмәткеһенең ҡиммәттәр йүнәлеше**

Башҡорт телен өйрәне һөҙөмтәһенең бер йүнәлеше булып башланғыс класс уҡыусылары тарафынан рухи ҡиммәттәрҙең системаһын төшөнөү һәм үҙләштереү тора. Башланғыс кластарҙа әсә теле дәрестәрендә түбәндәге **рухи ҡиммәттәр**гә иғтибар бүлеү мотлаҡ.

**Изгелек ҡиммәте** - үҙеңде һанап бөтөргөһөҙ бәйләнештәрҙән торған донъяның бер өлөшө итеп тойоу, кешеләрҙең тел ярҙамында бер-береһе менән бәйләнеше әҙәплелекте таныуға нигеҙләнеуен аңлау.

**Аралашыу ҡиммәте** - аралашыуҙы йәмғиәттең, мәҙәниәттең әһәмиәтле бер өлөшө итеп таныу.

**Матурлыҡ (гармония) ҡиммәте** — башҡорт теленең матур, яғымлы халыҡ байлығы булыуын аңлап үҙләштереү.

**Хеҙмәт һәм ижад ҡиммәте** - хеҙмәт кешелек йәшәйешенең төп шарты, халәте булыуын ҡабул итеү. Хеҙмәткә һөйөү тәрбиәләүҙә уҡыу эшмәкәрлегенең әһәмиәте ҙур. Уҡыу эшмәкәрлеге барышында ойошҡанлыҡҡа, үҙаллылыҡҡа, яуаплылыҡҡа, хеҙмәтте һөйөргә өйрәнергә мөмкин икәнлеген аңлау.

**Илһөйәрлек ҡиммәте** - үҙ телеңде һәм халҡыңды хөрмәт итеү, халыҡтың йолаларын, ғөрөф-ғәҙәттәрен өйрәнеү, ғаилә, ил алдында бәләкәйҙән үк яуаплы булыуҙы тойоп үҫеү.

**Кешелеклелек ҡиммәте** - үҙең һәм башҡалар өсөн яуаплылыҡ тойоп үҫеү, кешенең йәшәү урыны булған тәбиғәтте һаҡлау кәрәклеген аңлау.

**Башҡорт телен үҙләштереүҙең шәхси, метапредмет һәм предмет һөҙөмтәләре**

Яңы стандарттарға ярашлы уҡыу сифатын өйрәнгәндә, йәғни тикшереү процесында, түбәндәге һөҙөмтәләр күҙаллана:

- шәхсиүсеш кимәле;
- метапредмет кимәле;
- предмет буйынса белем кимәле.

**Шәхси үсеш кимәле**. Баланы шәхес итеп үҫтереү, кешелек сифаттарын тәрбиәләү. Уны үҙ аллы үсешкә, камиллашыу оҫталығына өйрәтеү. Һөҙөмтәлә уҡымышлы, үҙ еренең, иленең, халҡының ҡиммәттәренә төшөнгән, уны һанлаған һәм һаҡлаған, яҡлаған социум итеп формалаштырыуға башланғыс нигеҙ һалыу.

**Метапредмет кимәле**. Универсаль эш төрҙәренә өйрәтеү: танып белеү, ойоштороу һәм коммуникатив эшмәкәрлек, йәғни баланы үҙ аллы уҡырға, белем алырға өйрәтеү.

**Универсаль эш төрҙәренә өйрәтеү**: танып белеү, шәхси, ойоштороу һәм коммуникатив эшмәкәрлек. Шәхси эшмәкәрлекбаланы уҡымышлы һәм аңлы шәхес итеп үҫтереү. Эшмәкәрлекте унын тормош һәм кешелеклелек ҡиммәттәрен, әхлаҡи һәм мораль нормаларҙы аңлап ҡабулитеүеп, әйләнә-тирәләге күренештәргә һәм ваҡиғаларға шәхси ҡарашын формалаштырыуға йүнәлтеү.

**Ойоштороу эшмәкәрлеге** танып белеү процесы менән идара итеүҙе күҙ уңында тота: эшмәкәрлекте күҙаллау, планлашты рыу, башҡарыу, тикшереү, үҙгәрештәр индереү һәм баһалауҙы үҙ эсенә ала.

**Танып белеү эшмәкәрлеге** тейешле мәғлүмәтте эҙләп табыу һәм анализлауҙы, проблемаларҙы хәл итеү юлдарын эҙләүҙе һәм ҡулланыуҙы тәьмин итә.

**Аралашыу эшмәкәрлеге** белем алыу процесында аралашырға өйрәнеүҙе ойоштороуға йүнәлтелгән. Ул башҡа кешеләрҙе тыңлай белеү һәм аңлауҙы, мәғлүмәтте теүәл тапшырыуҙы үҙ эсенә ала.

**Предмет кимәле**. Уҡыу предметын өйрәнеүҙә яңы белем үҙләштереү, уны эшкәртеү һәм ҡулланыу өлкәһендә тейешле тәжрибә туплау.

## 1-се класс

## Шәхси үсеш кимәле

«Башҡорт теле» предметын үҙләштергәндә, уҡытыусы **шәхси үсеш кимәлен үҫтереү бурысын ҡуя:**

-телдең һәм телмәрҙең кешеләр тормошондағы әһәмиәтен аңлау;

-тексты эмоциональ ҡабул итеү, үҙеңдең хис-тойғоларыңды белдереү;

-кешеләрҙең хис-тойғоларын аңлау, уртаҡлашыу, бүлешеү;

-укылған әҫәрҙәрҙең геройҙарына һәм уларҙың эшенә ҡарата үҙеңдең мөнәсәбәтеңде белдереү.

**Метапредмет кимәле**

Ойоштороу эшмәкәрлеге:

-уҡытыусы ярҙамында эшмәкәрлек маҡсатын билдәләү;

-дәрестә эш барышын һөйләп барыу;

-дәреслек материалы менән эшләү барышында уйҙы, фаразды әйтеү;

-уҡытыусы тәҡдим иткән план буйынса эшләү;
-коллектив төҙөлгән план буйынса эшләү.
Танып белеү эшмәкәрлеғе:
-дәреслектең, матур яҙыу өлгөләренең айышына төшөнөү (тышы, йөкмәткеhе, шартлы билдәләре);
-дәреслектән, текстан, иллюстрацияларҙан hорауға яуап табыу;
-бергәләп йәки үҙ аллы башҡарған эш буйынса hығымта яhай белеү;
-ҙур булмаған текстың йөкмәткеhен hөйләү.

**Аралашыу эшмәкәрлеге**:
-фекереңде телдән формалаштырыу;
-кешенең телмәрен тыңлау hәм аңлау;
-тыңлай белеүҙең уңышлы аралашыуға шарт булыуын үҙләштереү;
-тексты тасуири уҡыу hәм йөкмәткеhен hөйләү;
-уҡытыусы hәм класташтар менән берлектә тәртип ҡағиҙәләре hәм уларҙы үтәү тураhында килешеү.

**Предмет үҙләштереү кимәле**
-тексты hөйләмдәр теҙмәhенән айыра белеү;
-бөтөн hүҙҙәр менән аңлы, дөрөҫ уҡыу;
-тексты ентекле hөйләй белеү;
-хикәйә төҙөү;
-hүҙҙең өндәрен атау, ижеккә бүлеү, өндәр hәм хәрефтәр hанын билдәләү, дөрөҫ баҫым ҡуйыу, хәреф-өн анализы яhау;
-hөйләмде, кешенең исемен hәм фамилияhын баш хәреф менән яҙыу;
-hөйләм аҙағында тейешле тыныш билдәләрен ҡуйып яҙыу;
-баҫма тексты күсереп яҙыу, hүҙҙәрҙе hәм ҙур булмаған hөйләмдәрҙе диктант итеп яҙыу;
-тамырҙаш hүҙҙәрҙең тамырын табыу.

## 2-се класс

## Шәхси үҫеш кимәле

-телдең hәм телмәрҙең кешеләр тормошондағы әhәмиәтен аңлау;
-тексты эмоциональ ҡабул итеү, үҙеңдең хис-тойғоларың менән бүлешеү;
-кешеләрҙең хис-тойғоларын аңлау, уртаҡлашыу, бүлешеү;
-башҡа кешеләрҙең яҙма hәм hөйләү телмәренә иғтибар итеү (интонация, темп, тон, hүҙҙәр hәм тыныш билдәләренең ҡулланылышы h. б.).
Был hөҙөмтәләргә ирешеүҙең сараhы булып дәреслектәге күнегеүҙәр тора.

**Метапредмет кимәле**
Ойоштороу эшмәкәрдеге:
-уҡытыусы ярҙамында эшмәкәрлек маҡсатын билдәләү;
-планлаштырыу;
-hөҙөмтәне hәм белемде үҙләштереү кимәлен күҙаллау;
-дәрестә эш барышын hөйләп аңлатып барыу;
-дәреслек материалы менән эшләү барышында фекер, фараз менән уртаҡлашыу;
-уҡытыусы тәҡдим иткән план буйынса эшләү;

-коллектив төҙөлгән план буйынса эшләү;
-тикшереү;
- төҙәтмәләр индереү;
- баһалау.

**Танып белеү эшмәкәрлеге**:

-дәреслектең, һүҙлектәрҙең, белешмәләрҙең айышына төшөнөү (йөкмәткеһе, шартлы билдәләре);
-дәреслектән, текстан, таблицаларҙан, схемаларҙан, иллюстрацияларҙан һорауға яуап табыу;
-күмәкләп йәки үҙ аллы башҡарған эш буйынса һығымта яһай белеү;
-ҙур булмаған текстың йөкмәткеһен һөйләү;
-бер төрлө информацияны икенсе төрлө формаға үҙгәртеү.

**Аралашыу эшмәкәрлеге**:

-үҙеңдең фекереңде телдән һәм яҙма рәүештә формалаштырыу;
-кешенең телмәрен тыңлау һәм аңлау, телмәрҙең темаһын, терәк һүҙҙәрен билдәләү;
-тексты тасуири уҡыу һәм йөкмәткеһен һөйләү;
-уҡытыусы һәм класташтар менән берлектә тәртип ҡағиҙәләре һәм уларҙы үтәү, аралашыу тураһында килешеү;
-парлап, төркөмләп эшләргә өйрәнеү, төрлө ролдәр үтәү (башҡарыусы йәки лидер).

**Предмет үҙләштереү кимәле**

-уҡытыусы йәки уҡыусыларҙың һөйләгән тексын ишетеп ҡабул итеү;
-тексты һөйләмдәр теҙмәһенән айыра белеү;
-бөтөн һүҙҙәр менән аңлы, дөрөҫ, тасуири уҡыу;
-текстың исемен (атамаһын) аңлау, тексҡа исем һайлап алыу йәки ҡушыу;
-тексты өлөштәргә бүлеү, һәр бүлеккә исем ҡушыу (план төҙөү);
-ентекле йәки һайланған өлөштөң йөкмәткеһен һөйләү;
- тексты ентекле һөйләй белеү;
-ҡыҫҡа хикәйә төҙөү;
-һүҙҙең өндәрен дөрөҫ атау, һүҙҙе ижеккә бүлеү, өндәр һәм хәрефтәр һанын билдәләү, дөрөҫ баҫым ҡуйыу, баҫымлы һәм баҫымһыҙ ижектәрҙе табыу, телдән өн-хәреф анализы яһау;
-һөйләм аҙағында тейешле тыныш билдәләрен ҡуйыу;
-баҫма тексты дөрөҫ итеп күсереп яҙыу, яҙылғанды өлгө менән сағыштырып тикшереү;
-һүҙҙәрҙе һәм ҙур булмаған һөйләмдәрҙе, 30-40 һүҙҙән торған тексты диктант итеп яҙыу;
-һүҙҙәрҙең ауыр яҙылышлы урындарын күреү һәм дөрөҫ яҙыу;
-һөйләмде, кешенең исемен һәм фамилияһын, географик атамаларҙы, хайуан ҡушаматтарын баш хәреф менән яҙыу; нәҙеклек (ь) һәм ҡалынлыҡ (ъ) билдәләрен, йә, йө, йү, йе, йо, йы ҡушымсаларын дөрөҫ яҙыу;
- өйрәнелгән ҡағиҙәләргә хаталарҙы табып төҙәтеү;
-тамырҙаш һүҙҙәрҙең тамырын табыу, ялғауҙарҙы айыра белеү һәм билдәләү;
-һүҙҙәргә һорау ҡуйыу; кем? нимә? һорауына яуап биреүсе һүҙҙәрҙе

-күреү, һөйләмдә кем йәки нимә тураһында һүҙ барыуын асыҡлау;
-бирелгән һүҙҙәрҙән йәки тема буйынса һөйләмдәр төҙөү;
-картина йәки бирелгән тема буйынса ҙур булмаған текст төҙөү, уҡытыусы ярҙамында 4-5 һөйләмдән торған тексты дәфтәргә яҙыу.

**3-сө класс**
**Шәхси үҫеш кимәле**

-Башҡорт теленең матурлығынһәм тасуирлығын тоя белеү,телде ихтирам итеү;
-үҙ телеңде камиллаштырырға ынтылыу;
-тыуған ереңә,халҡыңаһәм милләтеңә ихтирамлы булыу;
- белем алыу менәнҡыҙыҡыныу;

**Метапредмет кимәле**

-дәрестең темаһын һәм маҡсатын уҡытыусы ярҙамында билдәләү;
-уҡытыусы мөнән бергә проблеманы хәл итеү планын төҙөү;
-план буйынса эшләү, эшеңде план менән сағыштырыу, төҙәтмәләр индереү;
-уҡытыусы менән диалог барышында баһалау үлсәме критерийҙар төҙөү,
-үҙеңдең һәм башҡаларҙың эшенең уңышлылығын ошо үлсәм ярҙамында тикшереү.

**Танып белеү эшмәкәрлеге**:
-текст мәғлүмәтенең бөтә төрҙәрен уҡыу (текстың үҙен, текстан һуңғы аңлатмаларҙы);
-уҡыуҙың төрлө төрҙәрен ҡулланыу: өйрәнеү, ҡарап сығыу, танышыу;
-төрлө формала бирелгән мәғлүмәтте ҡуллана белеү (тотош текст, иллюстрация, таблицалар, схемалар);
-һүҙлектәр, белешмәләр менән ҡулланыу;
-анализ һәм синтез эшләү;
-сәбәп-һөҙөмтә бәйләнештәре булдырыу.

**Аралашыу эшмәкәрлеге**:
-телмәр ситуацияһына ярашлы рәүештә үҙ фекереңде телдән һәм яҙма сағылдырыу;
-аралашыу мәсьәләләрен хәл итеү маҡсатында тел сараларын ҡулланыу;
-диалог һәм монолог телмәр төрҙәре менән ҡуллана алыу;
-үҙ фекереңде әйтә һәм дәлилләй алыу;
-башҡаларҙы тыңлау һәм ишетеү, үҙ фекереңде үҙгәртә алыуға әҙер булыу;
-бер фекергә килеү һәм уртаҡ эшмәкәрлек тураһында килешеү, план төҙөү;
-аңлашылмаған мәсьәләләр буйынса һорауҙар биреү.

**Предмет үҙләштереү кимәле**

-өндәр һәм хәрефтәрҙе, ҡалын һәм нәҙек һуҙынҡыларҙы, яңғырау һәм һаңғырау тартынҡыларҙы айырыу, фонетик анализ яһау;
- һүҙ составы (тамыр һәм ялғауҙар) буйынса тикшереү, яһаусы һәм үҙгәртеүсе ялғауҙарҙы таныу;
-ҡушма һүҙҙәрҙе, ҡушма һүҙҙәрҙә ҡалын һәм нәҙек айырыу билдәләрен, ялғауҙарҙы, нәҙеклек билдәһенә бөткән һүҙҙәрҙә ялғауҙарҙы, ҡуш тартынҡыларҙы, тамыр һүҙҙәрҙәге о-ө, ы-е хәрефтәренең ялғау ҡушҡанда ла

һаҡланыу һәм яҙылмау осраҡтарын белеү һәм дөрөҫ яҙыу;
-исемдәрҙе, ҡылымдарҙы, сифаттарҙы, ярҙамсы һүҙҙәрҙе таныу һәм программа кимәлендә морфологик анализ яһау;
-һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе, һөйләмдәрҙе айырыу, һөйләмде һүҙбәйләнештәргә тарҡатыу;
-һөйләү маҡсатына ҡарап, һөйләмде өс төргә бүлеү һәм тейешле тыныш билдәләрен ҡуйыу;
-һөйләмдең баш һәм эйәрсән киҫәктәрен белеү;
-һөйләмдең тиң киҫәктәрен күреү, теркәүестәр булмаған осраҡта тейешле тыныш билдәләрен ҡуйыу, телмәрҙә һаналып киткән һүҙҙәрҙе ҡулланыу;
-һүҙҙәрҙең лексик һәм грамматик мәғәнәһен айыра белеү, тура һәм күсмә мәғәнәле һүҙҙәрҙе, синоним, антоним, омонимдарҙы белеү һәм телмәрҙә ҡулланыу;
-нығынған һүҙбәйләнештәрҙең мәғәнәһен аңлатыу, уларҙы телмәрҙә ҡулланыу;
-дәреслектән нәфис әҙәбиәтте уҡыу (хикәйә, әкиәт, шиғыр). Тексты логик яҡтан тамамланған өлөштәргә бүлеү. Уларға исем ҡушыу (план төҙөү);
-тәҡдим ителгән текст буйынса ентекле изложение яҙыу.

**4-се класс**

**Шәхси үҫеш кимәле**

-башҡорт теленең матурлығын, тасуирилығын һәм яғымлылығын тоя белеү һәм уның менән ғорурланыу, башҡорт теле менәнҡыҙыҡһыныу;
-белем алыуҙың мөһимлеген, үҫеш өсөн кәрәклеген аңлау;
-белем алыу өсөн төрлө сығанаҡтар ҡулланыу;
-телмәр мәҙәниәтен камиллаштырыуға ынтылыштың үҫеүе;
-башҡа халыҡтар мәҙәниәтенә толерантлы мөнәсәбәт булдырыу.

**Метапредмет кимәле**

-дәрестең темаһын һәм маҡсатын үҙ аллы билдәләү;
-уҡытыусы, коллектив менән бергә йәки үҙ аллы проблеманы хәлитеү планын төҙөү;
-план буйынса эшләү, эшеңде план менән сағыштырыу, кәрәк саҡта төҙәтмәләр индереү;
- үҙ-үҙеңә контроллек итеү һәм баһа биреүҙе тормошҡа ашырыу.

**Танып белеү эшмәкәрлеге:**

-текст мәғлүмәтенең бөтә төрҙәрен уҡыу (текстың үҙен,текстан һуңғы аңлатмаларҙы, өҫтәмә таблицаларҙы, схемаларҙы);
-уҡыуҙың төрлө төрҙәрен ҡулланыу: тулыһынса өйрәнеү, ҡарапсығыу, танышыу;
-төрлө формала бирелгән мәғлүмәтте ҡуллана белеү (тотош текс, иллюстрация, таблица, схемалар);
-мәғлүмәтте бер төрҙән икенсе тергә әйләндереү (планын төҙөү, схемаһын, таблицаһын эшләү, проектын төҙөү);
-һүҙлектәр, белешмәләр менән ҡулланыу;

-анализ һәм синтез эшләү;
-сәбәп-һөҙөмтә бәйләнештәре булдырыу;
-фекерләү һәм хикәйәләү тибындағы текст төҙөү.

**Аралашыу эшмәкәрлеге:**

-телмәр ситуацияһына ярашлы рәүештә үҙ фекереңде телдән һәм яҙма сағылдырыу;
-аралашыу мәсьәләләрен хәл итеү маҡсатында тел сараларын ҡулланыу;
-диалог һәм монолог телмәр төрҙәре менән ҡуллана алыу;
-үҙ фекереңде әйтә һәм иҫбатлай алыу;
-башҡаларҙы тыңлау һәм ишетеү, үҙ фекереңде яҡлай йәки үҙгәртәалыу;
-бер фекергә килеү һәм уртаҡ эшмәкәрлек тураһында килешеү, план төҙөү;
-аңлашылмаған мәсьәләләр буйынса һорауҙар биреү;
-парлап йәки төркөмләп эшләү барышында аралашыу;
-ғаиләлә, йәштәштәрең менән шәхси үҙ-ара мөнәсәбәттәр, бәхәсле ситуацияларҙың сиселешен хәл итеү.

**Предмет үҙләштереү кимәле**

-өн һәм хәрефтәр тураһында үтелгәнде системалаштырыу, һүҙгә тулы фонетик анализ яһау;
-һүҙҙәрҙең составын белеү, тамырҙаш һүҙҙәр табыу, яһаусы һәм үҙгәртеүсе ялғауҙарҙы айырыу, һүҙ составына анализ яһау;
-башҡорт теленең орфограммалары тураһында белемдәрҙе системаға һалыу. Тыныш билдәләрен дөрөҫ ҡуйып, хатаһыҙ күсереп яҙыу. Төрлө тикшереү эштәрен үтәргә өйрәнеү;
-һүҙ, һүҙбәйләнеш һәм һөйләмдең оҡшаш һәм айырмалы яҡтарын белеү. Һөйләү маҡсаты буйынса һөйләмдәрҙе хәбәр, һорау, өндәү һөйләмдәргә айырыу, уларҙы дөрөҫ интонация менән уҡыу һәм тейешле тыныш билдәләрен ҡуйып яҙыу. Һөйләмдең баш һәм эйәрсән киҫәктәрен табыу. Тарҡау һәм йыйнаҡ һөйләмдәрҙе үҙләштереү. Һөйләмдең тиң киҫәктәрен телмәрҙә ҡулланыу, улар араһында тейешле тыныш билдәләрен ҡуйыу. Тиң киҫәктәр менән һөйләмдәр уйлау;
-ябай һөйләмгә синтаксик анализ яһау;
-исемдәрҙең йәнле һәм йәнһеҙ предметтарҙы атау функцияһын, грамматик үҙенсәлектәрен белеү, исемдәргә морфологик анализ яһау;
-ҡалын һәм нәҙек килеш ялғауҙарын, рус теленән ингән һүҙҙәрҙең килеш ялғауҙарын дөрөҫ яҙыу;
-алмаштарҙың телмәрҙәге функцияһын аңлау, алмаш төркөмсәләрен белеү, алмаштарға морфологик анализ яһау;
-сифаттарҙың грамматик үҙенсәлектәрен белеү, уларға морфологик анализ яһау, артыҡлыҡ дәрәжәһендәге сифаттарҙы дөрөҫ яҙыу;
-ҡылымдарҙың яһалышын, грамматик үҙенсәлектәрен, һөйләмдәге функцияһын белеү. Ҡылымға морфологик анализ яһау;
-рәүештәрҙең грамматик үҙенсәлектәрен белеү, рәүеш менән сифаттарҙың оҡшашлығын һәм айырмаһын үҙләштереү. Рәүешкә морфологик анализ яһау;

-ябай һәм ҡушма һандарҙы айырыу, һан төркөмсәләрен, һандарҙың дөрөҫ яҙылышын үҙләштереү. Һанға морфологик анализ яһау;
-ярҙамсы һүҙҙәрҙе дөрөҫ яҙыу;
-һүҙҙең лексик һәм грамматик мәғәнәләрен аңлау, Күп мәғәнәле, тура һәм күсмә мәғәнәле һүҙҙәрҙе телмәрҙә ҡулланыу.
Синонимдарҙы, антоним дарҙы, омонимдарҙы, нығынған һүҙбәйләнештәрҙе телмәрҙә ҡулланыу;
- бәйләнешле текст төҙөү. Текст буйынса план төҙөү. Тексттың йөкмәткеһен һөйләү. Инша, изложение яҙыу;
- фәнни тексты уҡыу һәм аңлау (өлөштәрен билдәләү, һәр өлөшкә исем ҡушыу, һорауҙар биреү);
- тыңлаған тексттың темаһын билдәләү;
- хикәйәләү тибындағы ентекле изложение яҙыу (90-100 һүҙ), тейешле әҙерлектән һуң тәҡдим ителгән темаға инша яҙыу;
- телмәр этикетын үҙләштереү һәм ғәмәлдә ҡулланыу.

## «Башҡорт теле» уҡыу предметының йөкмәткеһе
## 1-се класс
## Грамотаға өйрәтеү. Әлифба

**Графика. Өн һәм хәреф**. Үпкәнән килә торған һауа ағымының кәртәгә осрауы һәм осрамауына ҡарап, өндәрҙең һуҙынҡыларға һәм тартынҡыларға бүленеше. Ҡалын һәм нәҙек һуҙынҡылар. Парлы һәм парһыҙ, яңғырау һәм һаңғырау тартынҡылар. Ҡ, к, п өндәренең ғ, г, б өндәре менән сиратлашыуы. Һүҙҙә нисә өн һәм нисә хәреф барлығын билдәләү. Өн һәм хәрефтең бер-береһенә тура килмәгән осраҡтарын билдәләү һәм күрһәтеү. Һүҙҙәрҙе ижеккә бүлеү. Баҫым. Алфавиттағы хәрефтәр тәртибе.
**Һүҙ.** Балаларға таныш предметтарҙы: уйынсыҡтар, уҡыу кәрәк-яраҡтары, өҫ-баш кейемдәре, йәнлектәр, үҫемлек һ. б. дөйөм исем аҫтында туплатыу. Һүҙҙәрҙе, мәғәнәләренә ҡарап, кем? нимә? ни эшләй? ниндәй? һорауҙары буйынса төркөмләү, уларҙы һөйләмдән табып, һорау ҡуйыу, телмәрҙә ҡулланыу.
**Һөйләм**. Телмәрҙән һөйләмде айырып алыу. Бирелгән һүҙҙәр менән, картиналар һәм һүрәттәр буйынса һөйләмдәртөҙөү. Һөйләмдең беренсе һүҙен баш хәреф менән яҙыу. Һөйләм аҙағында нөктә (йыл аҙағында - һораү һәм өндәү) билдәләре ҡуйыу.Шиғыр, хикәйә, йыр, әкиәт, мәҡәл, йомаҡ кеүек жанрҙарҙы айырыу.

## Башҡорт теле

**Фонетика**. Әлифба осоронда «Өн һәм хәреф» темаһы буйынса алған белемдәрҙе системаға килтереү. Һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәр. Нәҙек һәм

ҡалын һүҙҙәр. Уларҙы тамғалау. Яңғырау һәм һаңғырау тартынҡылар. Ижек. һүҙҙе ижеккә бүлеү. Һүҙҙе юлдан юлға күсереү.
**Һүҙ башында э хәрефе**. Һүҙ уртаһында е хәрефе. Й хәрефенең яҙылышы. Йо, йө, йе, йү, йы, йә ҡушымсалары. Үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә е, ё, ю, я хәреф-тамғалары. У-ү хәрефле һүҙҙәр.
**Һүҙ.** Предметтың атамаһын белдергән һүҙҙәр. Предметтың билдәһен белдергән һүҙҙәр. Предметтың хәрәкәтен (эшен) белдергән һүҙҙәр. *һәм, менән, да-дә, ҙа-ҙә, ла-лә, та-тә, ғына- генә, ҡына-кенә* ярҙамсы һүҙҙәре.
**Һөйләм**. һорау һөйләм. Өндәү һөйләм. Хәбәр һөйләм. О-ө хәрефле һүҙҙәр. Һөйләмдең сиктәрен билдәләү.
**Орфография һәм пунктуация**. Кешенең исем- фамилияларын, хайуан ҡушаматтарын һәм ер-һыу атамаларын ҙур хәреф менән яҙыу. Ярҙамсы һүҙҙәрҙең айырым яҙылыуы.
**Универсаль уҡыу эш төрҙәре**. Уҡыу эшмәкәрлегенә өйрәнеү. Хәреф һәм өндәрҙе таныу. Ижектәрҙе һәм һүҙҙәрҙе, һөйләмдәрҙе ҡушып уҡыу. Текстарҙы аңлы һәм тасуири уҡыу.
Хәрефтәрҙе айырым һәм бер береһе менән тоташтырып яҙыу. Һүҙ һәм һөйләмдәрҙе, ҡыҫҡа текстарҙы күсереп яҙыу. Ишеткәнде яҙыу (диктант). Уҡытыусы ҡуйған һорауға тулы һәм асыҡ яуап биреү, дәрестә иғтибар менән тыңлау, уҡытыусы ҡушҡанды аңларға өйрәнеү. Үҙ-ара һөйләшеү (диалог) ҡороу. Тел күренештәрен күҙәтеү, сағыштырыу, анализлау һәм һығымта яһау. Үҙ аллы белем алырға өйрәнеү. Уҡытыусы ярҙамында маҡсат ҡуйыу. Эште планлаштырыу һәм уның буйынса эшләү. Тикшереү. Эште баһалау.

## 2-се класс

**Графика**. Өн һәм хәреф. Хәреф һәм өн. Ике өндө белдереүсе хәрефтәр: я, е, ё, ю. У, ү хәрефтәренең ике өндө белдереүе. В хәрефенең үҙенсәлеге. һуҙынҡыларҙың һүҙҙәрҙе үҙгәртеүҙәге, яңы һүҙҙәр яһауҙағы һәм үҙҙәренең янында торған тартынҡыларҙың ҡалынлығын йәки нәҙеклеген билдәләүҙәге әһәмиәте. Һүҙҙе юлдан юлға күсереү, абзац. Башҡорт теле орфографияһының нигеҙҙәре. Һүҙҙәге өндәрҙе тикшереү тәртибе. Һүҙҙең өн моделе.
**Морфология, һүҙ төркөмдәре**. Предмет атамаһын белдереүсе һүҙҙәр. Кем? Кемдәр? Нимә? Нимәләр? һорауына яуап биреүсе һүҙҙәр. Уларҙың белдергән мәғәнәһе, телмәрҙә ҡулланылышы. Кешенең исем-фамилияһын, хайуандарҙың ҡушаматтарын, ер-һыу атамаларын белдереүсе һүҙҙәр, уларҙы баш хәреф менән яҙыу.
**Предметтың хәрәкәтен белдереүсе һүҙҙәр**. Уларҙың белдергән мәғәнәһе. Ни эшләй? Ни эшләне? Ни эшләр? йәки Ни эшләйәсәк? һорауҙарына яуап биреүсе һүҙҙәр. Уларҙың һөйләмдәге әһәмиәте һәм урыны.
**Предмет билдәһен белдереүсе һүҙҙәр**. Уларҙың аңлатҡан мәғәнәһе, әһәмиәте. Предмет билдәһен белдереүсе һүҙҙәре булған һүҙбәйләнештәр.
**Ярҙамсы һүҙҙәр**: ***һәм, менән, -да, -дә, -ҙа, -ҙә, -та, -тә, -ла, -лә, ғына, генә, ҡына, кенә.*** Уларҙың айырым яҙылышы, айырым торғанда мәғәнә аңлатмауы, баҫымһыҙ булыуы һәм телмәрҙә ҡулланылышы.
**Һүҙьяһалыш**. Тамырҙаш һүҙҙәрҙе уҡыу, яҙыу, төркөмләү (термин бирелмәй).

**Синтаксис.**Һүҙ, һүҙбәйләнеш, һөйләм. Уларҙың оҡшашлығы һәм айырмаһы. Әйтеү маҡсаты буйынса һөйләм интонацияһы һәм төрҙәре. Хәбәр һөйләм. Һорау һөйләм. Өндәү һөйләм. Һөйләмдең баш һәм эйәрсән киҫәктәре. Эйә, хәбәр, эйәрсән киҫәктәр.

**Орфография һәм пунктуация**. Дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләрен өйрәнеү һәм ғәмәли ҡулланыу. Йә, йө, йү, йе, йо, йы ҡушымсалы һүҙҙәр. Һүҙҙәрҙә ике өндө белдергән я, е, ё, ю хәрефтәре. Һүҙ башында [уы], [үә] өндәре, в хәрефе. Һөйләмдең баш хәреф менән яҙылышы. Кешенең фамилияһы һәм исеменең, хайуан ҡушаматтарының, ер-һыу атамаларының баш хәреф менәняҙылышы. Хәбәр, һорау, өндәү һөйләмдәр аҙағында тыныш билдәләре. Һаналып киткән һүҙҙәр араһында тыныш билдәләре.

**Телмәр үҫтереү**. Аралашыу ситуацияһы. Уға ярашлы һөйләшеү (диалог) төҙөү.Текст. Тексты таныу. Текстың атамаһы. Текстағы һөйләмдәрҙең мәғәнәүи эҙмә-эҙлелеге. Текст төҙөү. Монолог (сығыш яһау, иғлан эшләү, доклад). Аралашыу этикеты (сәләм биреү, хушлашыу, ғәфү үтенеү, һорау менән мөрәжәғәт итеү, рәхмәт белдереү).

**Универсаль уҡыу эш төрҙәре**. Үҙ аллы белем алыуҙың башланғыс алымдарын өйрәнеү. Уҡыу эшмәкәрлеге буйынса башланғыс күнекмәләр алыу (маҡсат ҡуйыу, уҡыу материалы менән ҡыҙыҡһыныу, эште планлаштырыу, белем алыу буйынса мәсьәләне хәл итеү, эҙләнеү эше, рефлексия, контроль, баһа). Аралашыу мәҙәниәте,

## 3-сө класс

**Фонетика һәм орфоэпия**. Өндәр һәм хәрефтәр. Өндәрҙең һуҙынҡыларға һәм тартынҡыларға бүленеше. Ҡалын һәм нәҙек һуҙынҡылар. Яңғырау һәм һаңғырау тартынҡылар. Һүҙҙәрҙә тартынҡыларҙың сиратлашыуы ***{китап - китабы, ҡалаҡ-ҡалағы).*** Нәҙек һәм ҡалын һуҙынҡылар. Һүҙҙәргә фонетик анализ.

**Һүҙ составы.**Һүҙ составы (тамыр һәм ялғауҙар). Тамырҙаш һүҙҙәр. Уларҙың тамыры. Яһаусы һәм үҙгәртеүсе ялғауҙар. Һүҙьяһалыш. Ҡушма һүҙҙәр. Ҡушылып яҙылыусы ҡушма һүҙҙәр. Ҡабатлау юлы менән йәки парлап яһалған ҡушма һүҙҙәр. Ҡушма һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылышы. Ҡушма һүҙҙәрҙә ҡалын (ъ) һәм нәҙек (ь) айырыу билдәләренең яҙылышы. Һүҙҙәргә составы буйынса анализ. Һүҙ төҙөлөшө. Һүҙҙең тамыры. Тамыр нигеҙле һүҙҙәр. Һүҙ нигеҙе тураһында төшөнсә. Яһалма һәм ҡушма һүҙҙәр. Ялғауҙар.

**Орфография һәм пунктуация**. Ялғауҙарҙың дөрөҫ яҙылышы. Ялғау ҡушылғанда бер иш тартынҡыларҙың килеп сығышы. Тамыр һүҙҙәрҙеге о-ө, ы-е хәрефтәренең ялғау ҡушҡанда ла һаҡланыуы. О-ө, ы-е хәрефтәренең тамыр һүҙҙәрҙә яҙылмау осраҡтары ***(тупраҡ, япрағы).*** Нәҙеклек билдәһенә бөткән һүҙҙәрҙә ялғауҙарҙың яҙылышы. Алынма һүҙҙәрҙә ялғауҙар яҙылышы.

**Морфология.** Үҙ аллы һүҙ төркөмдәре. Ярҙамсы һүҙҙәр.

**Предмет атамаһы**. Уны һөйләмдә ҡулланыу. Исемдең һорауҙары. Яңғыҙлыҡ исемдәр. Кешенең исем-фамилияһының, хайуан ҡушаматтарының, ер-һыу атамаларының, китап һәм газета-журнал исемдәренең ҙур хәреф менән яҙылышы.

**Билдәне белдергән һүҙҙәр**. Уларҙың исем алдынан килеүе, телмәрҙәге әһәмиәте.

**Хәрәкәтте белдереүсе һүҙҙәр.**Һөйләмдә уларҙы таныу, дөрөҫ һорау ҡуйыу. Был һүҙҙәрҙең һөйләмдә хәбәр ролен үтәүе.

**Ярҙамсы һүҙҙәр**. Ярҙамсы һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылышы.

**Синтаксис.**Һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе, һөйләмдәрҙе таныу, уларҙың оҡшаш һәм айырмалы яҡтары. Һөйләмде һүҙбәйләнештәргә тарҡатыу. Һөйләмдә һүҙҙәр тәртибе. Һөйләү маҡсатына ҡарап, һөйләмде өс төргә бүлеү: хәбәр, һорау һәм өндәү. Һөйләмдең баш һәм эйәрсән киҫәктәре. Һөйләмдең тиң киҫәктәре. Һөйләмгәсинтаксик анализ.

**Лексика**. Һүҙҙәрҙең лексик һәм грамматик мәғәнәһе. Тура һәм күсмә мәғәнәле һүҙҙәр. Синонимдар, антонимдар, омоним дар. Нығынған һүҙбәйләнештәрҙең мәғәнәһен аңлатыу, улар менән һөйләмдәр төҙөү.

**Телмәр һәм уның төрҙәре**. Һөйләү телмәре. Диалог. Әңгәмәсе менән диалог ҡороу. Аралашыу оҫталығын шымартыу. Монолог. Уны һөйләү оҫталығы (логик эҙмә-эҙлелек һәм тасуирилыҡ). Эске телмәр.

**Хикәйә. Әкиәт. Шиғыр.** Тексты логик яҡтан тамамланған өлөштәргә бүлеү.
Уларға исем ҡушыу (план). Абзац. Ҡыҙыл юл. Бәләкәй күләмле хикәйәләр (текст) ижад итеү. Текстҡа ҡарата ҡыҫҡа баһалама яҙыу. Әкиәт. Әкиәт ижад итеү. Шиғыр төҙөлөшөн өйрәнеү. Шиғырҙы күсереп яҙыу үҙенсәлектәре.

**Телмәр үҫтереү**. Телмәр мәҙәниәте. Темаға ярашлы тәбиғәт күренештәре, тормош-көнкүреш, ҡыҙыҡлы хәлдәр тураһында ҡыҫҡа текст төҙөү. Бирелгән нигеҙ һүҙҙәр ярҙамында текст төҙөү.

**Текстҡа план төҙөү**. Тексттың өлөштәре һәм һөйләмдәр араһында мәғәнәүи бәйләнеш булдырыу. Тексттың темаһы, төҙөлөшө (инеш, төп өлөш,йомғаҡлау).

Әҙер йәки коллектив төҙөлгән план буйынса текст төҙөү. Тәҡдим ителгәнтекст буйынса изложение (50-60 һүҙ) яҙыу. Хикәйә һәм инша яҙыу (65-70 һүҙ). Әкиәт төҙөү.

## 4-се класс

Дүртенсе класс программаһы уҡыусыларҙың 1-3-сө кластарҙа үҙләштергән белемдәрен системаға килтереү, тулыландырыу, телмәр эшмәкәрлеген тулыһынса формалаштырыу, белем алыу күнекмәләрен сифатлы кимәлгә күтәреү маҡсатын ҡуя.

### Йөкмәткеһе

**Фонетика һәм орфоэпия**. Өн һәм хәреф. Ҡайһы бер өндәрҙең үҙенсәлекле әйтелеше. Ижек, баҫым. Һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәр. Нәҙек һәм ҡалын һуҙынҡылар. Парлы һәм парһыҙ, яңғырау һәм һаңғырау тартынҡылар. Һүҙгә тулы фонетик анализ яһау.

**Һүҙ составы**. Һүҙҙәрҙең составы: тамыр һәм ялғау. Тамырҙаш һүҙҙәр. Яһаусы һәм үҙгәртеүсе ялғауҙар. Һүҙьяһалыш. Һүҙ составы буйынса анализ,

**Орфография һәм пунктуация.** Башҡорт теле орфограммалары тураһында белемдәрҙе системаға һалыу. Тыныш билдәләрен дөрөҫ ҡуйып, хатаһыҙ

күсереп яҙыу, диктант, изложение, инша яҙыу. Төрлө тикшереү эштәрен үтәргә өйрәнеү.

**Синтаксис**. Һүҙ, һүҙбәйләнеш һәм һөйләм. Уларҙың оҡшаш һәм айырмалы яҡтары. Һөйләү маҡсаты буйынса һөйләмдәрҙе хәбәр, һорау, өндәү һөйләмдәргә айырыу, уларҙы дөрөҫ интонация менән уҡыу һәм тейешле тыныш билдәләрен ҡуйып яҙыу. Һөйләмдең баш һәм эйәрсән киҫәктәре. Эйәрсән киҫәктәр: анығлаусы, тултырыусы, хәл. Тарҡау һәм йыйнаҡ һөйләмдәр. Һөйләмдең тиң киҫәктәре. Ябай һөйләмгә синтаксик анализ.

**Морфология**. Һүҙ төркөмдәре. Үҙ аллы һүҙ төркөмдәре. Ярҙамсы һүҙҙәр.

**Исем**. Исемдәрҙең йәнле һәм йәнһеҙ предметтарҙы атау функцияһы. Исемдең һорауҙары. Уртаҡлыҡ һәм яңғыҙлыҡ исемдәр. Исемдәрҙең һан менән үҙгәреше: берлек һәм күплек һаны, уларҙың күрһәткестәре. Төрлө килештә килгән исемдәрҙең һөйләмдәге функцияһы. Исемдәрҙең эйәлек заты менән үҙгәреше. Исемдәрҙең килеш менән үҙгәреше. Уның мәғәнәһе һәм белдерелеү сараһы. Килеш һорауҙары. Ҡалын һәм нәҙек килеш ялғауҙары. Рус теленән ингән һүҙҙәрҙең килеш менән үҙгәреше.Исемдәрҙең яһалыш төрҙәре (тамыр, яһалма, ҡушма, парлы). Исемдәргә морфологик анализ.

**Алмаш.** Алмаштарҙың телмәрҙәге функцияһы. Алмаш төркөмсәләре. Зат алмаштары. Эйәлек заты алмаштары. Һорау һәм күрһәтеү алмаштары. Алмаштарҙың килеш менән үҙгәреше. Алмашҡа морфологик анализ.

**Сифат**. Тамыр һәм яһалма сифаттар. Сифаттарҙың үҙгәреше. Төп һәм шартлы сифаттар. Сифат дәрәжәләре. Сифатҡа морфологик анализ.

**Ҡылым**. Ҡылымдарҙың яһалышы. Тамыр, яһалма, ҡушма ҡылымдар. Ҡылымдарҙың үҙгәреше (заман, зат, һан). Ҡылымдарҙың барлыҡ һәм юҡлыҡ формалары.

**Ҡылымдарҙың үткән замаиы**. Уларҙың зат һәм һан менән үҙгәреше, барлыҡ-юҡлыҡ, шаһитлы-шаһитһыҙ формалары.

**Ҡылымдарҙың хәҙерге заманы**. Уларҙың зат һәм һан менән үҙгәреше, барлыҡ-юҡлыҡ формалары.

**Ҡылымдарҙың киләсәк заманы**. Киләсәк заман ҡылымдарының ике формаһы. Уларҙың зат һәм һан менән үҙгәреше, барлыҡ-юҡлыҡ формалары.

Ҡылымдарҙың шарт һәм теләк һөйкәлештәре. Ҡылымға морфологик анализ.

**Рәүеш**. Рәүештәрҙең яһалышы. Рәүеш төркөмсәләре. Рәүеш менән сифаттарҙың оҡшашлығы һәм айырмаһы. Рәүешкә морфологик анализ.

**Һан**. Ябай һәм ҡушма һандар. Һан төркөмсәләре. Һандарҙың дөрөҫ яҙылышы. Һанға морфологик анализ.

**Лексика,** һүҙҙең лексик һәм грамматик мәғәнәләре. Һүҙҙең күп мәғәнәлелеге. Тура һәм күсмә мәғәнәле һүҙҙәр. Мәғәнәләре менән бер үк төрлө булған йәки бер-береһенән мәғәнә төҫмөрҙәре менән айырыла торған һүҙҙәр - синонимдар. Антонимдар. Омонимдар. Ныҡынған һүҙбәйләнештәр. Уларҙы телмәрҙә ҡулланыу.

**Телмәр үҫтереү**. Бәйләнешле телмәр. Текст. Уның мәғәнәүи өлөштәре. Абзац. Ҡыҙыл юл. Идея-тематик йөкмәтке. Текст буйынса план төҙөү. Тексттың йөкмәткеһен һөйләү. Инша, изложение яҙыу.

**Телмәр этикеты.**

Ярҙамсы һүҙҙәр. Ярҙамсы һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылышы.

## Программаны тормошҡа ашырыу формалары:

-фронталь;
-парлы;
-төркөм менән;
-индивидуаль.

## Программаны тормошҡа ашырыу алымдары:

- практик;
-аңлатыу;
-эҙләнеү;
-күҙәтеү;

Ҡулланыу саралары:
-моделдәр һәм таблицалар;
- һүрәттәр;
-дидактик материал.

## Белем кимәлен диагностикалау формалары:

| | 1 класс | 2 класс | 3 класс | 4 класс |
|---|---|---|---|---|
| Контроль диктант | 2 | 9 | 9 | 9 |
| Һүҙлек диктанты | | 9 | 9 | 9 |
| Тест | | 4 | 4 | 4 |
| | | | | |

**Тематик план**
**1-се класс**
**Грамотаға өйрәтеү. Әлифба**

***102 с***

| № | Дәрес темаһы | Сәғәт һаны | Уҡыусылар эшмәкәрлеге |
|---|---|---|---|
| 1 | Белем байрамы. Бәйләнешле телмәр. | 1 | Мәктәп, уҡытыусы, класташтар менән танышыу. Әңгәмәләшеү. Темаға ярашлы «Әлифба» дәреслегендә бирелгән сюжетлы һүрәттәр буйынса һөйләмдәр төҙөү. |
| 2 | Нимә ул предмет? | 1 | Предметты күҙәтеү, тикшереү. Һүҙҙе әйтеү һәм ишетеү |
| 3 | Предмет һәм һүҙ. Предметтың атамаһын белдергән һүҙҙәр. | 1 | Предмет һәм һүҙ төшөнсәһен сағыштырыу. Уларҙың айырмалыҡтарын табыу. Һорауҙарға яуап биреү, һорау ҡуйыу, диалогта ҡатнашыу. |
| 4 | Предметтың атамаһын белдергән һүҙҙәр. | 1 | Һөйләмде һүҙҙәргә таркатыу. Предмет атамаларын кү- ҙәтеү, һүҙҙәргә кем? нимә? кемдәр? нимәләр? һорауҙа рын дөрөҫ ҡуйыу. Һөйләм һыҙмаһында предметтың атамаһын белдереүсе һүҙҙе билдәләү. Төрлө предмет атамаларын төркөмләү. |
| 5-6 | Предметтың хәрәкәтен белдергән һүҙҙәр | 2 | Предметтың хәрәкәтен белдергән һүҙҙәрҙең аңлаткан мәғәнәһен үҙләштереү. Уларға дөрөҫ һорау ҡуйыу. Предметтың хәрәкәтен белдергән һүҙҙәр менән һүҙ бәйләнештәр, һөйләмдәр төҙөү; уларҙың һөйләмдәге урынын билдәләү, һыҙмала күрһәтеү. |
| 7-8 | Предметтың билдәһен белдергән һүҙҙәр. | 2 | Предметтың билдәһен белдергән һүҙҙәрҙең мәғәнәһе һәм үҙенсәлектәре. Предметҡа хас булған билдәләрҙе әйтеү, уларҙы күҙәтеү һәм сағыштырыу. |
| 9 | Һүҙбәйләнеш. | 1 | Һүҙбәйләнештәр төҙөү. Уларҙы телмәрҙән айырып алыу. Һүрәттәр йөкмәткеһенә ярашлы һүҙбәйләнештәр төҙөү. |
| 10-11 | Һөйләм. | 2 | Һөйләм тураһында төшөнсә. Һөйләмде күҙәтеү, һүҙбәйләнештәр менән сағыштырыу. Уҡытыусының һорауҙарына тулы һәм асыҡяуап биреү, диалогта ҡатнашыу. Һөйләмде дөрөҫ интонация менән әйтеү. Телмәрҙән һөйләмде айырып |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | | | алыу. һөйләмде һүҙбәйләнештәргә һәм һүҙҙәргә тарҡатыу. Бирелгән һүҙҙәр йәки картина буйынса һөйләмдәр төҙөү. Уларҙың һыҙмаһын үҙләштереү Өндәшеү маҡсатына ярашлы рәүештә нөктә, һорау, өндәү билдәләре ҡуйыу. |
| 12 | *Һәм, менән, ла-лә, та-тә, ҙа-ҙә,да-дә* ярҙамсы һүҙҙәре | 1 | *һәм, менән, ла-лә, та-тә, ҙа-ҙә, да- дә* ярҙамсы һүҙҙәрен телмәрҙә таныу, дөрөҫ интонация менән уҡыу (баҫымһыҙ). Уларҙы һөйләмдән үҙҙәре бәйләнеп килгән һүҙҙәр менән айырып алыу, һыҙмала билдәләү. |
| 13 | Ярҙамсы һүҙҙәр: *ғына-генә, ҡына-кенә* | 1 | *ғына-генә, -ҡына –кенә* ярҙамсы һүҙҙәрен телмәрҙә таныу, дөрөҫ интонация менән әйтеү, уларҙы һыҙмала тамға менән билдәләү һәм телмәрҙә ҡулланыу. |
| 14 | Һүҙ. Өн. | 1 | Телмәрҙе һөйләмдәргә, һөйләмде һүҙҙәргә, һүҙҙе ижектәргә, ижекте өндәргә бүлеү. һүҙҙе әйтеү, тыңлау. һүҙҙән кәрәкле өндө айырып алыу. Һүҙҙең һәр өнөн айырып әйтеү һәм һәр өндө шаҡмаҡтар ярҙамында билдәләү. |
| 15 | Һүҙҙә нисә өн? | 1 | Һүҙҙәрҙе әйтеү, тыңлау, өндәрҙе айырып алыу һәм сағыштырыу, Һүҙ моделендә һәр өндө үҙ шаҡмағына ҡуйыу. Һүҙҙәге өндәрҙе тыңлау, ишетеү, өндәрҙе әйтеү һәм һанау. |
| 16 | Һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәр. Ижек | 1 | Һүҙҙе әйтеү, тыңлау. Уны ижектәргә бүлеү. Һүҙҙә төрлө юлдар менән ижектәр һанын билдәләү. Өндәрҙе күҙәтеү, уларҙы айырыу ысулдарын һәм юлдарын табыу. Һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәрҙе әйтеүҙә үпкәнән өрөлгән һауаның хәрәкәт итеүен күҙәтеү. Һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәрҙең оҡшаш һәм айырмалы яҡтарын аңлата белеү. |
| 17 | Нәҙек һәм ҡалын өндәр. Нәҙек, ҡалын әйтелешле һүҙҙәр | 1 | Нәҙек һәм ҡалын әйтелешле өндәрҙе сағыштырыу, айырыу. Ҡалын һәм нәҙек әйтелешле һүҙҙәрҙе сағыштырыу. Һүҙҙәрҙәге сингармонизм законын күҙәтеү. Һүҙҙәргә анализ эшләү, өн моделен һыҙыу. |
| 18 | Һаңғырау, яңғырау тартынҡылар. | 1 | Тартынҡыларҙы күҙәтеү. Яңғырау һәм һаңғырау тартынҡыларҙы сағыштырыу һәм уларға хас айырма- лыҡтарҙы билдәләү, |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | | | һығымта яһау. Һүҙ моделендә уларҙы билдәләү. |
| 19 | Баçым. | 1 | Һүҙҙәрҙә баçымлы ижекте кеслө тауыш менән айырып әйтеү, уны билдәләү. Һуҙынҡы өндәргә баçым төшөүе, Башҡорт теленең баçым үҙенсәлектәре. |
| 20 | Һаңғырау, яңғырау тартынҡы өн. | 1 | Өн-хәреф анализы яһау. Һүҙҙәрҙең моделен төҙөү. Кәрәкле өндәр булған һүҙҙәр табыу. Һүҙҙәрҙе яңғырау һәм һаңғырау тартынҡыларына ярашлы төркөмләү. Парлап диалог төҙөү. |
| 21 | Һүҙҙең өн моделе. | 1 | Һүҙҙе әйтеү, тыңлау. һүҙҙең һәр өнөн ишетеү һәм тауыш ярҙамында әйтеү. Һүҙҙең өн моделен төҙөү, анализлау. |
| 22 | Хәреф өндөң тамғаһы. | 1 | Һуҙынҡы һәм тартынҡы, ҡалын һәм нәҙек өндәрҙе айырып алыу. Һүҙҙәрҙең моделен төҙөү. |
| 23 | [ә] өнө. Әә хәрефе. | 1 | Әә өн хәрефен үҙләштереү. Һүҙҙәрҙә өндөң урынын билдәләү. Нәҙек һәм ҡалын өндәрҙе сағыштырыу, һығымта яһау. Әә хәрефтәрен яҙыу. Диктант яҙыу. |
| 24-25 | [а] өнө. Аа хәрефе. | 2 | Аа өн хәрефен үҙләштереү. [а] өнөн әйтеү, тыңлау. Һуҙынҡы өндәрҙең үҙенсәлектәрен аңлау. |
| 26 | Әә-Аа хәреф-тәре. | 1 | Әә-Аа хәрефтәрен дөрөç каллиграфия менән дәфтәргә яҙыу. Һүҙҙәрҙең өн моделен төҙөү. Диктант яҙыу. |
| 27 | [ө] өнө. Өө хәрефе. | 1 | Өө өн-хәрефен үҙләштереү. Өндө тыңлау, ишетеү, сағыштырыу, дөрөç әйтеү. Өө хәрефтәрен яҙыу. Хәреф диктанты. |
| 28-29 | [о] өнө. Оо хәрефе. | 2 | Оо өн'хәрефен үҙләштереү. [о] өнөн әйтеү, тыңлау, ҡылыҡһырлама биреү. Оо хәрефтәрен дөрөç матур каллиграфия менән яҙырға өйрәнеү. 0-ө өндәрен һәм хәрефтәрен сағыштырыу. |
| 30-31 | [ү] өнө. Үү хәрефе. | 2 | Үү өн-хәрефен үҙләштереү. [ү] өнөн тыңлау, сағыш тырыу, өнгә ҡылыҡһырлама биреү, дөрөç әйтеү. Үү хәрефтәрен дөрөç итеп яҙыу. |
| 32 | Уу өн-хәрефе. Умарталыҡта. | 1 | Уу өн-хәрефен үҙләштереү. [у] һуҙынҡы өнөн тыңлау, сағыштырыу, уға ҡылыҡһырлама биреү, дөрөç әйтеү. Уу хәрефтәрен яҙыу. Хәреф диктанты |
| 33 | Уу-Үү хәреф-тәре. | 1 | Нәҙек һәм ҡалын һүҙҙәрҙе күҙәтеү, сағыштырыу һәм һығымта яһау, Һүҙҙәрҙең |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | | | өн моделен төҙөү. Уу, Үү хәрефтәрен дөрөҫ каллиграфия менән яҙыу. Уу, Үү хәрефтәре булған һүҙҙәрҙе график һыҙманан уҡыу. Өйрәнелгән хәрефтәрҙе әйтеп яҙҙырыу. |
| 34-35 | [э] өнө.<br>Ээ(е) хәрефе. | 2 | Ээ өн-хәрефен үҙләштереү. [э] өнөн тыңлау, сағыштырыу. Э хәрефенең һүҙ башында ғына яҙылышы тураһында һығымта яһау. Ээ хәрефтәрен яҙыу. Ижектәр, һүҙҙәр, һөйләм күсереп яҙыу. Диалог тураһында башланғыс төшөнсә алыу. |
| 36-37 | [ы] өнө.<br>Ыы хәрефе. | 2 | Ыы өн-хәрефен үҙләштереү. [ы] өнөн тыңлау, сағыш- тырыу, анализ яһау, дөрөҫ әйтеү. Ыы хәрефтәрен яҙыу. Ижектәр, һүҙҙәр, һөйләм күсереп яҙыу. Һүҙҙәргә хәрефтәр өҫтәп яҙыу. |
| 38-39 | [и] өнө.<br>Ии хәрефе. | 2 | Ии өн-хәрефен үҙләштереү. [и] нәҙек һуҙынҡыһын тыңлау, сағыштырыу, ҡылыҡһырлама биреү, дөрөҫ әйтеү һәм матур яҙыу. Нәҙек һуҙынҡыны күҙәтеү. Ижектәр, һүҙҙәр, һөйләмдәр уҡыу һәм күсереп яҙыу. |
| 40-41 | [м] өнө.<br>Мм хәрефе. | 2 | Мм өн-хәрефен үҙләштереү. [м] өнөн күҙәтеү, сағыштырыу, өн анализы эшләү. Мм хәрефтәрен яҙыу, яңы хәреф менән ижектәр, һүҙҙәр яҙыу. Күсереп яҙыу. Мм хәрефтәрен башҡа хәрефтәр менән бәйләп яҙыу. |
| 42 | [н] өнө.<br>Нн хәрефе. | 1 | Нн өн-хәрефен үҙләштереү. [н] өнөн тыңлау, сағыш- тырыу, өн анализы яһау. Нн хәрефтәрен яҙыу, хәреф менән ижектәр, һүҙҙәр, һөйләмдәр яҙыу. Дәреслектән күсереп яҙыу. Нн хәрефтәрен башҡа хәрефтәр менән бәйләп яҙыу. |
| 43 | [ң] өнө,<br>ң хәрефе | 1 | ң өн-хәрефен үҙләштереү. [ң] өнөн тыңлау, сағышты рыу, ҡылыҡһырлама биреү, һүҙҙәрҙә ң өн-хәрефенең урынын билдәләү. Был өндөң һүҙҙең беренсе өнө бу- лып бер ваҡытта ла килмәүе тураһында һығымта яһау. ң хәрефен яҙыу. Ижектәр, һүҙҙәр, һөйләмдәр уҡыу һәм күсереп яҙыу. |
| 44 | [л] өнө.<br>Лл хәрефе. | 1 | Лл өн-хәрефен үҙләштереү. [л] өнөн тыңлау, сағыштырыу, ҡылыҡһырлама биреү, дөрөҫ әйтеү. Тартынҡы өндәрҙең үҙенсәлектәрен билдәләү. Лл хәрефтәрен яҙыу, башҡа |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | | | хәрефтәр менән бәйләү. Был хәреф менән ижектәр, һүҙҙәр уҡыу һәм яҙыу. |
| 45 | [р] өнө.<br>Рр хәрефе | 1 | Рр өн-хәрефен үҙләштереү. [р] өнөн тыңлау, сағыштырыу, ҡылыҡһырлама биреү, дөрөҫ әйтеү. Рр хәрефтәрен яҙыу. Ижектәр, һүҙҙәр, һөйләм күсереп яҙыу. Хәреф диктанты. |
| 46 | Тикшереү эше | 1 | Лл, Мм, Уу, Әә, Аа, Өө, Оо, Үү, Ыы, Ии, Ээ(е) хәрефтәрен дөрөҫ яҙыу. Был хәрефтәр менән һүҙҙәрҙе күсереп яҙыу. |
| 47-48 | [й] өнө.<br>Йй хәрефе. | 2 | Йй өн-хәрефен үҙләштереү. [й] өнөн тыңлау, сағыштырыу. Йй хәрефтәрен яҙыу. Ике-өс хәрефтән торған һүҙҙәрҙән диктант яҙыу. Күсереп яҙыу. |
| 49-50 | [г] өнө.<br>Гг хәрефе. | 2 | Гг өн-хәрефен үҙләштереү. [г] өнөн тыңлау, күҙәтеү, сағыштырыу. Гг хәрефтәрен яҙыу. Ижектәр, һүҙҙәр, һөйләм күсереп яҙыу. Диктант яҙыу. |
| 51-52 | [к] өнө.<br>Кк хәрефе. | 2 | Кк өн-хәрефен үҙләштереү. [к] өнөн тыңлау, сағыштырыу, ҡылыҡһырлама биреү, дөрөҫ әйтеү. Кк хәрефтәрен яҙыу. Ижектәр, һүҙҙәр, һөйләм күсереп яҙыу. Яҙғанды уҡыу һәм тикшереү. |
| 53 | [ғ] өнө.<br>Ғғ хәрефе. | 1 | Ғғ өн-хәрефен үҙләштереү. [ғ] өнөн тыңлау, сағыштырыу. Ғғ хәрефтәрен яҙыу. Ижектәр, һүҙҙәр, һөйләм күсереп яҙыу. |
| 54 | [ҡ] өнө.<br>Ҡҡ хәрефе. | 1 | Ҡҡ өн-хәрефен үҙләштереү. [ҡ] өнөн тыңлау, сағыш- тырыу, ҡылыҡһырлама биреү, дөрөҫ әйтеү. Ҡҡ хәрефтәрен яҙыу. Ижектәр, һүҙҙәр, һөйләм күсереп яҙыу. Ҡыҫҡа диктант. |
| 55-56 | Ғғ,<br>Ҡҡ хәрефтәре. | 2 | Гг, Ғғ, Ҡҡ өндәрен башҡа өндәр менән сағыштырыу. Гг, Ғғ, Ҡҡ хәрефтәрен дөрөҫ каллиграфия менән яҙыу. Уҡыу күнекмәләрен нығытыу. |
| 57-58 | [б] өнө.<br>Бб хәрефе. | 2 | Бб өн-хәрефен үҙләштереү. [б] өнөн тыңлау, сағыштырыу, өнгә ҡылыҡһырлама биреү, дөрөҫ әйтеү. Яңғырау тартынҡының әйтелешен күҙәтеү. Бб хәрефтәрен каллиграфик яҡтан дөрөҫ яҙыу. |
| 59 | Үтелгәндәрҙе нығытыу. | 1 | Өндәргә анализ биреү. Өйрәнелгән хәрефтәр менән һүҙҙәр, һөйләмдәр, ҡыҫҡа текстар уҡыу. Күсереп һәм ишеткәнде яҙыу. Картиналар буйынса һорауҙарға яуап биреү, һорауҙар ҡуйыу, текстар төҙөү. |
| 60 | Күсереп яҙыу. | 1 | Күсереп яҙыу ҡағиҙәһен үҙләштереү. Һүҙҙәр |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | | | теҙмәһен иғтибарлы күсереп яҙырға өйрәнеү. |
| 61 | [п] өнө.<br>Пп хәрефе. | 1 | Пп өн-хәрефен үҙләштереү. [п] өнөн тыңлау, Сағыштырыу, ҡылыкһырлама биреү, дөрөҫ әйтеү. Пп хәрефтәрен яҙыу. Ижектәр, һүҙҙәр, һөйләм күсереп яҙыу. Диктант. Яҙғанды уҡыу. |
| 62-63 | [з] өнө.<br>Зз хәрефе | 2 | Зз өн'хәрефен үҙләштереү. [з] өнөн тыңлау, сағыштырыу. Зз хәрефтәрен яҙыу. Ижектәр, һүҙҙәр, һөйләм күсереп яҙыу. Телефон аша аралашыу ҡағиҙәләрен үҙләштереү. |
| 64-65 | [с] өнө.<br>Сс хәрефе | 2 | Сс өн-хәрефен үҙләштереү. [с] өнөн тыңлау, сағыштырыу, өн анализы яһау, дөрөҫ әйтеү. Сс хәрефтәрен яҙыу. Ижек- тәр, һүҙҙәр, һөйләм күсереп яҙыу. Ҡыҫҡа һөйләмдәрҙән диктант яҙыу. |
| 66 | Телмәр үстереү.<br>Ҡоштар. | 1 | Башҡортостанда йәшәүсе ҡоштар тураһында һөйләшеү, текстар уҡыу. Ҡоштарға ярҙам итеү мөмкинлеген һәм сара ларын билдәләү. Уҡыу һәм һөйләү, күсереп яҙыу. |
| 67-68 | [ҙ] өнө.<br>Ҙҙ хәрефе. | 2 | Ҙҙ өн-хәрефен үҙләштереү. [ҙ] өнөн тыңлау, сағыштырыу, өн анализы яһау. Ҙҙ хәрефтәрен яҙыу. Ижектәр, һүҙҙәр, һөйләм күсереп яҙыу. |
| 69-70 | ҫ] өнө,<br>ҫ хәрефе. | 2 | ҫ өн-хәрефен үҙләштереү. [ҫ] өнөн тыңлау, сағыштырыу һәм был өндөң һүҙҙең беренсе өнө булып бер ваҡытта ла килмәүе тураһында һығымта яһау. ҫ хәрефен яҙыу. Ижектәр, һүҙҙәр, һөйләм күсереп яҙыу. |
| 71-72 | [д] өнө.<br>Дд хәрефе. | 2 | Дд өн-хәрефен үҙләштереү. [д] өнөн тыңлау, сағыштырыу. Дд хәрефтәрен яҙыу. Ижектәр, һүҙҙәр, һөйләм күсереп яҙыу. [д] һәм [т] өндәрен сағыштырыу, һығымта яһау. |
| 73-74 | [т] өнө.<br>Тт хәрефе. | 2 | Тт өн-хәрефен үҙләштереү. [т] өнөн тыңлау, сағыштырыу, өнгә ҡылыҡһырлама биреү, дөрөҫ әйтеү. Һаңғырау тартын ҡының әйтелешен күҙәтеү. Тт хәрефтәрен яҙыу. Тт хәрефле ижектәр, һүҙҙәр, һөйләмдәр уҡыу һәм күсереп яҙыу. Диктант. |
| 75 | [уы],[үе] тартынҡы өндәре.<br>Уу, Үү хәрефтәре. | 1 | У,ү хәрефтәренең тартынҡы өндәрҙе белдереүе, уларҙың һүҙҙәге урынын билдәләү. Был хәрефтәр менән һүҙҙәр уҡыу һәм яҙыу. У,ү хәрефле һүҙҙәрҙең моделен төҙөү. |
| 76 | [ж] өнө.<br>Ж ж хәрефе. | 1 | Жж өн-хәрефен үҙләштереү. [ж] |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | | | өнөнтыңлау, сағыштырыу, ҡылыҡһырлама биреү, дөрөҫ әйтеү. Жж хәрефтәрен яҙыу. Ижектәр, һүҙҙәр, һөйләм күсереп яҙыу. Диктант яҙыу. Шиғыр күсереп яҙыу үҙенсәлектәре. |
| 77-78 | [ш] өнө. Шш хәрефе. | 2 | Шш өн-хәрефен үҙләштереү. [ш] өнөн тыңлау, сағыштырыу, өн анализы яһау, дөрөҫ әйтеү. Һаңғырау өндө күҙәтеү. Шш хәрефтәрен яҙыу. Ижектәр, һүҙҙәр, һөйләм күсереп яҙыу. Диктант. |
| 79-80 | [в] өнө. Вв хәрефе. | 2 | Вв өн-хәрефен үҙләштереү. [в] өнөн тыңлау, сағыштырыу. Һүҙ башында, һүҙ уртаһында һәм аҙағында дөрөҫ әйтеү, уҡыу. Вв хәрефтәрен яҙыу. Ижектәр, һүҙҙәр, һөйләмдәр күсереп яҙыу. |
| 81-82 | [ф] өнө. Фф хәрефе. | 2 | Фф өн-хәрефен үҙләштереү. [ф] өнөн тыңлау, сағыштырыу. Фф хәрефтәрен яҙыу. Ижектәр, һүҙҙәр, һөйләм күсереп яҙыу. Хәреф, һүҙ, һөйләмдәрҙән диктант яҙыу. |
| 83-84 | Яя хәрефе. | 2 | Яя хәрефен яҙырға өйрәнеү. Яя хәрефенең ике өндө белдереүен үҙләштереү. Ижектәр, һүҙҙәр, һөйләм күсереп яҙыу, яҙма тексты уҡыу,һүҙҙәрҙең өн моделен төҙөү. |
| 85-86 | Ее хәрефе. | 2 | Ее хәрефенең ике өндө белдереүен үҙләштереү. Ее хәрефе булған һүҙҙәрҙе дөрөҫ уҡыу. Был хәреф менән һүҙҙәр яҙырға өйрәнеү. Һүҙҙәрҙең өн моделен төҙөү. |
